**Демонстрационная контрольная работа по родному (башкирскому) языку для 9 класса**

**Аңлатма һүҙ.**

Башҡорт теле буйынса уҡыусыларҙың белем кимәлен баһалауҙың төп критерийҙары.
Контроль диктанттарҙы баһалау.

Уҡытыусы башта тексты уҡып сыға. Өйрәнелмәгән орфограммалы һүҙҙәр алдан уҡ таҡтала яҙылған булырға тейеш. Уҡытыусы синыфтың әҙерлегенә ҡарап, әйтеп яҙҙырыу темпын үҙе билдәләй. Тексты орфоэпия, әҙәби тел нормаларына ярашлы уҡыу талап ителә. Уҡытыусыға ярҙам итеү маҡсатында йыйынтыҡ авторҙары текстар аҙағында грамматик эш төрҙәре тәҡдим ителә. Диктант яҙылып бөткәс, уҡыусыларға тексты уҡып һәм тикшереп сығыу рөхсәт ителә. Ләкин диктантты баштан уҡ уйлап, аңлап, иғтибарлы яҙырға өйрәтергә һәм һуңғы тикшертеү менән мауыҡмаҫҡа кәрәк. Уҡытыусы тексты икенсе тапҡыр тулы килеш уҡып сыҡҡас та, грамматик эш тәҡдим ителергә тейеш. Диктантҡа билдә ҡуйғанда хаталарҙың характерына иғтибар ителә.Хаталарҙы иҫәпләгәндә тупа: булмағандары,йәғни грамоталыҡты билдәләү өсөн әһәмиәте юҡтары, айырым билдәләнә. Түбәндәге хаталар тупаҫ булмағанға инә: ҡағиҙәнең иҫкәртмәһенә ҡараған хаталар, бәйләү юлы менән яһаған яңғыҙлыҡ атамаларҙа ҙур хәрефтең яҙылышында хаталар,бер тыныш билдәһе урынына икенсеһен ҡуйыу,үҙләштерелгән һүҙҙәрҙә ялғауҙар яҙылышында хаталар. Диктант бер генә билдәменән баһалана."5" – тупаҫ булмаған 1 орфографик, 2 пунктуацион хата булған эшкә, "4"-4 орфографик, 3 пунктуацион,йә 1 орфографик, 6 пункцион, йә орфографик хатаһыҙ, 7 пунктуацион хатаһы булған диктантҡа ҡуйыла. Әгәр хаталар араһында бер типтағылар булһа,5 орфографик хатаһы булған эшкә лә "4" ҡуйырға мөмкин. "3"–6 орфографик,6 пунктуацион,йә 3 орфографик, 9 пункцион, йә 12 пунктуацион хаталы эшкә ҡуйыла. Әгәр эштә өс бер типтағы хата ебәрелһә, 8 орфографик, 8 пунктуацион хаталы эшкәлә"3"ҡуйыла. "2"- 9 орфографик,9 пунктуацион йә 8 орфографик, 10 пунктуацион хатаһы булған эшкә ҡуйыла. Хата һаны15 орфографик хатанан да артып китһә "1" билдәһе ҡуйыу уҡытыусы ҡарамағында.

Контроль диктант:

| | |
|---|---|
| "5" | 1 орфографик,<br>2 пунктуацион |
| "4" | 1-2 орфографик,<br>2 -3 пунктуацион хата |
| "3" | 3-4 орфографик, |

| | |
|---|---|
| | 4-5 пунктуацион хата |
| “ 2” | 5 орфографик<br>4-6 пунктуацион хата |

***

...Бына юғарыға табан оҙонсаланып, аҡҡош муйынына барып тоташҡан йомроаҡ ҡорһағына ҡойроҡто уралтатерәп, туҙбаш йылан көршәктән һыу эсергә ынтылған. Уның йыланса нәфис, бормас тәне лә, айырса теле лә ҡыбырлаптора һымаҡ... Был — көршәктең тотҡаһы, тау ҡыҙҙары уны, ошо туҙбаш йыландан тотоп, яурындарына күтәреп ултыртҡандар...

Көршәктең эсе аҡһыл зәңгәргә буялған, ә тышы иртәнге аҡ томан баҫҡан, мең төрлө сәскәгә күмелгән туғайҙы хәтерләтә. Аһ, ниндәй генә сәскәләр юҡ был туғайҙа! **Иң ғәжәбе шул: уларҙың береһе лә төшөрөлгән түгел, ә үҙ стихияһына наҙланып ултырған тере сәскәләр!** Бына әле генә йәшенле ямғыр яуған, унын артынса ҡояш балҡып сыҡҡан,сәскәләр шуға һөйөнөп көлөп ебәргән!Мөғжизә!

Ә бына бында, теге туҙбаш йылан үрелеп сыҡҡан ерҙә, тау ландышы яңы ғына сәскә атҡан. Ынйы кеүек нәфис кескәй ҡыңғырау сәскәләр.Улар шул хәтле тереләр,хатта уларҙың хуш еҫтәре танауға бәрелгән һымаҡ.

**Функциональ грамоталыҡ буйынса эш төрҙәре:**

1. Өҙөккә исем бирергә.
2. Билдәләнгән һөйләмдең төрөн билдәләргә